**Рус мәктәптәренең 9 класс уҡыусылары өсөн туған (башҡорт) теленән дистанцион олимпиада һорауҙары**

1. Исемгә хас булған грамматик категорияны билдәләгеҙ:
   1. Дәрәжә
   2. Йүнәлеш
   3. Заман
   4. Килеш
   5. Һөйкәлеш

2. Артыҡлыҡ дәрәжәһендәге сифаттарҙан ғына торған юлды билдәләгеҙ:
   1. Ағыраҡ, ҙурыраҡ, ҡыҙылыраҡ, матурыраҡ
   2. Йәшерәк, һарғылт, көслө, йәм-йәшел
   3. Күм-күк, ифрат матур, үтә көслө
   4. Алһыу, матурыраҡ, оҙонса, ҡып-ҡыҙыл
   5. Аҡһыл, йәшкелт, күкһел, зәңгәрһыу

3. Күләм-дәрәжә рәүештәрен табығыҙ:
   1. Яҡында, бында, алда, йәнәшәлә
   2. Шәп, рәхәт, тиҙ, ҡапыл, кинәт
   3. Элек, борон, иртән, бая, бөгөн
   4. Күп, байтаҡ, әҙ-мәҙ, өсләтә, саҡ-саҡ
   5. Юрамал, бушҡа, юҡҡа, юрый

4. **Ҡунаҡтарҙы аштың тәмлеһе менән <u>һыйлау</u>, уларға матур урындарҙы <u>күрһәтеү</u> кеүек яҡшы ғәҙәт румын халҡында бик көслө** (С.Агиш). Аҫтына һыҙылған һүҙҙәр ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән?
   1. Сифат
   2. Алмаш
   3. Һан
   4. Рәүеш
   5. Ҡылым

5. **Болот күтәрелеү менән, көн һалҡынайып китте** һөйләмендә бәйләүестең ниндәй килештән һуң килгәнен билдәләгеҙ:
   1. Төп килештән һуң
   2. Эйәлек килештән һуң
   3. Төбәү килештән һуң
   4. Төшөм килештән һуң
   5. Сығанаҡ килештән һуң

6. Тиң аныҡлаусылары булған һөйләмде табығыҙ:
   1. Һеҙҙә эре биҙәкле ҡыҙыл тауарҙар күп, буғай (С.Агиш).

2. Унының ҡуйы ҡара ҡаштары юғары сөйөлдө.
3. Урам буйлап бейек матур йорттар теҙелгән.
4. Күҙҙең яуын алалар аҡ, ҡыҙыл, ал сәскәләр (С.Юлаев).
5. Ҡыҙҙың ҙур зәңгәр күҙҙәре нур бөркә.

7. Урын хәле булған һөйләмде билдәләргә:

1. Далала төрлөһө була.
2. Ыҙғыр көҙ етте.
3. Ҡуян булып ҡасҡансы, ыласын булып үлеү артығыраҡ.
4. Һөйәктәргә тиклем өшөгән бар, електәргә тиклем туңған бар.
5. Дөрөҫ яуап юҡ

8. **Хәҙер, аллаға шөкөр, донъя <u>тыныс</u>** (Һ.Дәүләтшина). Аҫтына һыҙылған һүҙ һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килгән?

1. Эйә
2. Тултырыусы
3. Хәбәр
4. Аныҡлаусы
5. Хәл

9. Һөйләмдәге тиң киҫәктәрҙең төрөн билдәләгеҙ: **Бөгөн башҡорт халҡының оҙон көйҙәре һәм дәртле бейеүҙәре меңләгән тамашасыны һоҡландыра**.

1. Тиң эйәләр
2. Тиң тултырыусылар
3. Тиң хәбәрҙәр
4. Тиң хәлдәр
5. Тиң аныҡлаусылар

10. Һөйләм киҫәктәре кире тәртиптә килгән һөйләмде табығыҙ:

1. Иртәнге саф һауа ҡырҙарҙан төрлө тауыштар тулҡыны алып килә (З.Биишева).
2. Көндәр һалҡынайып китте.
3. Хаттарҙың икенсеһе быйыл ғинуар айында яҙылған.
4. Күҙ алдында үҫеп, халҡының һөйөклө улына әүерелде Шәһит (Ғ.Рамазанов).
5. Халҡыбыҙ ер һөрә, ҡалалар төҙөй, ҡорос иретә.

11. Күләм-дәрәжә рәүештәрен табығыҙ:

1. Яҡында, бында, алда, йәнәшәлә
2. Шәп, рәхәт, тиҙ, ҡапыл, кинәт
3. Элек, борон, иртән, бая, бөгөн
4. Күп, байтаҡ, әҙ-мәҙ, өсләтә, саҡ-саҡ

5. Юрамал, бушҡа, юҡҡа, юрый

12. *Бара – барһа – барһын – барыбыҙ – барайыҡ.* Ҡылымдың ниндәй формаларына миҫалдар бирелгән?

1. Ҡылымдың һөйкәлеш формалары
2. Ҡылымдың барлыҡ-юҡлыҡ формалары
3. Ҡылымдың йүнәлеш формалары
4. Ҡылымдың күләм формалары
5. Дөрөҫ яуап юҡ

13. **Болот күтәрелеү менән, көн һалҡынайып китте** һөйләмендә бәйләүестең ниндәй килештән һуң килгәнен билдәләгеҙ:

1. Төп килештән һуң
2. Эйәлек килештән һуң
3. Төбәү килештән һуң
4. Төшөм килештән һуң
5. Сығанаҡ килештән һуң

14. **Тимербулатты бәләкәйерәк кенә ҡара тумалаҡ атҡа мендерҙеләр** һөйләмендә киҫәксәне табып, уның төрөн билдәләгеҙ:

1. Көсәйтеү киҫәксәһе
2. Икеләнеү киҫәксәһе
3. һорау киҫәксәһе
4. Сикләү киҫәксәһе
5. Раҫлау киҫәксәһе

15. **<u>Ах</u>, ул Юшатыр буйҙары**... һөйләмендә аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?

1. Теркәүес
2. Бәйләүес
3. Киҫәксә
4. Ымлыҡ
5. Мөнәсәбәт һүҙ

16. **Урман бында бик ҡалын.** Һөйләмдең хәбәре ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән?

1. Сифаттан
2. Исемдән
3. Алмаштан
4. Ҡылымдан
5. Рәүештән

17. Һөйләмдең ҡайһыныһы ике составлы һөйләм?

1. Ҡараңғылата ла башланы (Д.Юлтый).

2. Буран... Декабрҙең беренсе шәп бурандары (Д.Юлтый).
3. Атты сыбыртҡы менән ҡыумайҙар (Әйтем).
4. Тел ҡылыстан да үткер (Әйтем).
5. Телеңде теҙгендә тот, этеңде сынйырҙа тот (Мәҡәл).

18. Түбәндәге бер составлы һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ: **Юлда бик һыуһалды.**

1. Билдәле эйәле һөйләм
2. Дөйөм эйәле һөйләм
3. Билдәһеҙ эйәле һөйләм
4. Эйәһеҙ һөйләм
5. Атама һөйләм

19. Түбәндәге һөйләмдә инеш һүҙбәйләнеш ниндәй мәғәнә аңлата? **Унан, һис шикһеҙ, бик яҡшы ҡыйыу һуғышсы сығасаҡ** (Ф.Иҫәнғолов).

1. Шатланыуҙы
2. Икеләнеүҙе
3. Ғәжәпләнеүҙе
4. Дөрөҫләүҙе
5. Ышаныуҙы

20. **Ғилем – ҡош, аҡыл – ҡанат (**Әйтем**).** Һөйләмдә һыҙыҡ ни өсөн ҡуйылған?

1. Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һөйләмдәрҙән төҙөлгән теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм булғанға
2. Хәбәр эйәрсән һөйләм баш һөйләмдән һуң килгәнгә
3. Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле тиң хәбәрҙәр араһында
4. Эйә менән хәбәр бер үк һүҙ төркөмөнән килгәнгә
5. Дөрөҫ яуап юҡ

## Рус мәктәптәренең 9 класс уҡыусылары өсөн башҡорт әҙәбиәтенән дистанцион олимпиада һорауҙары

1. Ниндәй сәнғәт төрө һүҙ сәнғәтенә инә?
    1) Һынлы сәнғәт.
    2) Бейеү сәнғәте.
    3) Художестволы әҙәбиәт.
    4) Музыка, йыр сәнғәте.
2. “Урал батыр”, “Аҡбуҙат” кеүек халыҡ ижады әҫәрҙәре ниндәй жанрҙа ижад ителгән?
    1) Йола поэзияһы.
    2) Халыҡ ижадының сәсмә төрҙәре.
    3) Афористик жанрҙар.
    4) Героик эпос.
3. Ҡайһы эпик ҡобайырҙа төп герой ер аҫты батшалығына төшә?
    1) “Урал батыр”.
    2) “Аҡбуҙат”.
    3) “Иҙеүкәй менән Мораҙым”.
    4) “Аҡһаҡ ҡола”.
    5) “Ҡуңыр буға”.
4. Шлиссельбург ҡәлғәһендә һаҡсыларға ташланып батырҙарса һәләк булған башҡорт ихтилалы етәксеһе кем?
    1) Алдар.
    2) Күсем.
    3) Батырша.
    4) Ҡараһаҡал.
    5) Салауат.

5. Ҡуҙыйкүрпәстең бәләкәйҙән йәрәшелгән ҡыҙының исеме нисек?
   1) Һомай.
   2) Нәркәс.
   3) Маянһылыу.
   4) Зөһрә.
6. Байназар тархандың улы, йөҙҙән артыҡ йыл йәшәгән сәсән кем?
   1) Ҡобағош.
   2) Ерәнсә.
   3) Байыҡ.
   4) Ҡарас.
   5) Килдеш.
7. Рогервик крепосына мәңгелек һөргөнгә ебәрелгән шағир, сәсән, ихтилал етәкселәренең береһе кем?
   1) Батырша.
   2) Кинйә.
   3) Салауат.
   4) Ҡараһаҡал.
   5) Алдар.
8. Салауатка арналған “Батыр яраһы” тигән әҫәрҙе кем яҙған?
   1) Б. Бикбай.
   2) М. Кәрим.
   3) З. Биишева.
   4) Ҡ Аралбай.
   5) Ғ. Әмири.
9. Башҡорттар тормошона арналған “Ильяс”, “Кешегә күпме ер кәрәк” әҫәрҙәренең авторы кем?

1) А. Пушкин.
2) С. Аксаков.
3) Л. Толстой.
4) М. Салтыков-Щедрин.
5) Г. Успенский.

10. Салауатҡа арналған тәүге драма әҫәренең авторы кем?
    1) Ф. Сөләймәнов.
    2) С. Мирасов.
    3) Б. Бикбай.
    4) М. Кәрим.

11. М. Ғафури ҡайһы әҫәрендә революцияға тиклемге эшселәр тормошон һүрәтләй?
    1) “Ҡара йөҙҙәр”.
    2) “Тормош баҫҡыстары”.
    3) “Шағирҙың алтын приискыһында”.
    4) “Ҡыҙыл йондоҙ”.

12. Ҡобағош һәм Аҡмырҙа сәсәндәр ҡасан йәшәгән?
    1) XIII быуат.
    2) XIV быуат.
    3) XV быуат.
    4) XVI быуат.
    5) XVII быуат.

13. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булған “Әҙәбиәт теорияһы” китабының авторы кем?
    1) Ғ. Хөсәйенов.
    2) Ә. Харисов.

3) К. Мәргән.
4) Р. Бикбаев.

14. “Юлай менән Салауат” эпосында ҡайһы һүҙ оҫтаһының образы бар?
    1) Ҡонҡас.
    2) Буранбай-Йәркәй.
    3) Ерәнсә.
    4) Ҡарас.
    5) Байыҡ Айҙар.

15. Байыҡ Айҙар сәсән нисәнсе быуаттарҙа йәшәгән?
    1) XV – XVI быуаттар.
    2) XVI – XVII быуаттар.
    3) XVII – XVIII быуаттар.
    4) XVIII – XIX быуаттар.
    5) XIX – XX быуаттар.

16. 1841 – 1907. Был дата ҡайһы әҙиптең йәшәгән йылдары?
    1) Р. Фәхретдинов.
    2) М. Аҡмулла.
    3) С. Яҡшығолов.
    4) М. Өмөтбаев.
    5) Ш. Әминев.

17. Нимә ул лирика?
    1) Композицион сара.
    2) Әҙәби төр.
    3) Жанр формаһы.
    4) Сюжет элементы.

18. Ҡарас сәсән ҡасан йәшәгән?

1) XV быуат.
2) XV быуат – XVI быуат башы.
3) XVII быуат аҙағы – XVIII быуат.
4) XVIII быуат.
5) XVIII быуат аҙағы – XIX быуат.

19. Лирик сигенеү. Һөйкәлмә образ. Һөйкәлмә ваҡиға. Пейзаж. Интерьер. Был төшөнсәләр түбәндәге төркөмдәрҙең ҡайһыһына ҡарай?

1) Сюжеттың ярҙамсы элементтары.
2) Автор һүҙҙәре.
3) Композицион саралар.
4) Художество деталдәре.
5) Һүрәтләү саралары.

20. Нимә ул троптар?

1) Художестволы әҫәрҙең лексик һүрәтләү саралары.
2) Һүрәтләү сараларының бер төрө: стилистик фигуралар.
3) Өндәрҙең оҡшаш яңғырашына нигеҙләнгән һүрәтләү саралары.
4) Сағыштырыуҙың ҡатмарлы формаларына ҡоролған һүрәтләү саралары.
5) Кинәйәлеккә нигеҙләнгән һүрәтләү саралары.